*Әхтәм АБУШАХМАНОВ,*
*Башҡортостан театр эшмәкәрҙәре союзы рәйесе,*
*Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы*



# ТЕАТР – ТОРМОШ ДАУАМЫ

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы етәкселеге театрҙарҙың матди базаһын нығытыу йәһәтенән күп эш атҡара. 2000 йылда М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры ғәжәйеп матур бинаһына ҡайтты, Өфө «Нур» татар дәүләт театрының һоҡланғыс бинаһы төҙөлөп бөтөп бара, Башҡортостан Республикаһының Милли йәштәр театры бинаһы ла яңыртып төҙөлә башланы. Быйылғы уҡыу йылы башында Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр факультеты ҙур бүләк алды: бөтә сәнғәт ҡанундары талаптарына яуап биргән бина яңыртып төҙөлдө.

Финанс ҡыйынлыҡтарына ҡарамайынса, республика хөкүмәте театр коллективтарының гастролдәре уңышлы үтһен һәм улар төрлө театр форумдарында әүҙем ҡатнашһын өсөн тейешле шарттар булдырырға ынтыла.

Һуңғы йылдарҙа Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры Аспендости (Төркиә) VI Халыҡ-ара музыка фестивалендә һәм Ырымбурҙа «Ҡунаҡхана» театр фестивалендә сығыш яһаны. Республика рус академия драма театры «Киев — май айында» һәм Магнитогорскиҙа уҙған «Театрҙың сиге юҡ» IV Халыҡ-ара фестивалдәрендә ҡатнашты.

М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма һәм Башҡортостан Республикаһының Милли йәштәр театрҙары төрки телле театрҙарҙың Ҡазанда үткән «Науруҙ» Халыҡ-ара фестивалендә сығыш яһаны. Бынан тыш Йәштәр театры Новгородта уҙған «Әкиәт батша» V Бөтә Рәсәй театр фестивалендә, Йошкар-Олала милли республикаларҙың рус театрҙарының V Халыҡ-ара театр фестивалендә, Воронежда «XXI быуатта балалар һәм йәштәр театрҙары» Халыҡ-ара фестивалендә ҡатнашты. Стәрлетамаҡ театрҙар берекмәһененең башҡорт театры — «Андижан-бахори —99» Халыҡ-ара фестивалендә, Туймазы дәүләт татар театры Рәсәйҙең бәләкәй ҡалалары те-



05-2001.p65 123 27.07.01, 12:19

атрҙарының II фестивалендә уңышлы сығыш яһаны.

Башҡортостан Рәсәй театр эшмәкәрҙәре союзы менән берлектә Төрки телле театрҙарҙың «Туғанлыҡ» халыҡ-ара фестивален ойоштороусыларҙың береһе булып тора һәм унда сит ил коллективтары менән бергә Рәсәй Федерацияһы республикалары театрҙары ла ҡатнашты. «Туғанлыҡ» III фестивале 2000 йылдың май-июнь айҙарында Өфөлә уңышлы үтте.

Республикабыҙҙағы 11 театр коллективы араһында хаҡлы рәүештә төп урындарҙы биләгән өс театр бар: Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры һәм 1998 йылда академия театры исеменә лайыҡ булған Республика рус драма театры. 2000 йылда Президент Мортаза Рәхимовтың указы менән Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына республика хөкүмәтенән ижади һәм финанс-хужалыҡ эшмәкәрлегендә махсус ярҙам алыу хоҡуғы бирелде.

М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының Башҡортостан мәҙәниәте өлкәһендә ҡыҙыҡлы асыштар һәм матур ҡаҙаныштар үҙәге булыуы бәхәсһеҙ. Һуңғы ике сезонда театрҙа байтаҡ ҡыҙыҡлы әҫәрҙәр сәхнәгә ҡуйылды. Улар араһында Р.Кинйәбаевтың «Их, Байтимер дуҫ!», Сәрүәр Суринаның «Заятүләк менән Һыуһылыу» әкиәте, Ш.Рәхмәтуллиндың «Ҡоштар ояһына ҡайта» әҫәрҙәре бар. Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтеп китеү урынлы: М.Ғафури исемендәге театр актерҙар ғына түгел, һәләтле драматургтар ҙа тәрбиәләй. Азат Нәҙерғолов ҡуйған «Айгөл иле» спектакле Башҡортостандың халыҡ шағиры һәм драматург Мостай Кәримгә 80 йәш тулыуға арналды һәм был спектакль «Туғанлыҡ» III халыҡ-ара фестивалендә ҡатнашты, унда төп ролде башҡарып Алһыу Ғәлина «Өмөт» тигән махсус призға лайыҡ булды.

Башҡорт академия драма театры Башҡортостанда ғына түгел, унан ситтә лә киң танылыу һәм тамашасылар һөйөүен яулаған коллектив. Яңы сезон башланған мәлдә театрҙың художество етәксеһеҙ ҡалыуы байтаҡ ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы. Әлбиттә, художество етәксеһенең йыш алмашыныуы ижади үҫешкә булышлыҡ итмәй. Шулай ҙа милләтебеҙҙең йөҙөк ҡашы булған коллектив киләсәктә лә үҙенең иң матур сифаттарын юғалтмаҫ, заман һулышын тойоп, ҡабатланмаҫ зауыҡ һәм табыштар эҙләүен дауам итер тип ышанғы килә. Театрҙың яңы директоры, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Хөрмәт Үтәшевҡа ла уңыштар теләйек.

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бөгөнгө көндә юғары профессиональ күтәренкелек кисерә һәм уны ысын мәғәнәһендә театр һәм художестволыҡ өлгөһө тип атарға мөмкин. Быйылғы сезонда Заһир Исмәғилевтың «Ҡаһым түрә» операһының премьераһы булып үтте. Төп геройы башҡорт полководецы Ҡаһым түрә булған был тарихи драма тамашасылар күңеленә хуш килде. Рөстәм Ғәлиев ҡуйған «Мементо» опера тамашаһы ла Салауат Низаметдиновтың ғына түгел, бөтә театр коллективының уңышы. Ғөмүмән, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры талантарға бай. Йырсы Аҫҡар Абдразаҡовтың исеме бөтә донъяға билдәле, Илдар Абдразаҡов Италияла уҙған Мария Каллас исемендәге һәм «Вердиев тауыштары» берләшкән халыҡ-ара конкурста Гран-при яуланы. Йәш, талантлы балерина, Будапештта үткән Рудольф Нуриев исемендәге халыҡ-ара конкурс дипломанты Гүзәл Сәләймәнова Ш.Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына лайыҡ булды.

Республика рус академия драма театры иһә республикабыҙҙа халыҡ иң күп йөрөгән театр һанала. Бында, әлбиттә, уның художество етәксеһе, Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Михаил Рабиновичтың хеҙмәт өлөшө ҙур. Театр репертуарында тамашасыларҙы йәлеп итерҙәй әҫәрҙәр байтаҡ, һуңғы йылдарҙа әхлаҡи-психологик йөкмәткеле пьесаларға айырыуса ҙур урын



05-2001.p65 124 27.07.01, 12:19

бирелә. Надежда Пушкинаның «Кил һәм кит» һәм «Ул үлгәндә» дилогияһы тап шундай спектакль. Театр ситтән дә режиссерҙар йәлеп итә, был иһә сәхнәгә ҡуйылған әҫәрҙәргә яңылыҡ, төрлөлөк, үҙенсәлек өҫтәй. А.Н.Островскийҙың «Ғәйепһеҙҙән ғәйепләр» һәм А.П.Чеховтың «Аҡсарлаҡ» әҫәрҙәрен Валерий Ахадов ҡуйҙы һәм ҙур уңыш ҡаҙанды.

Һуңғы ваҡытта Башҡортостан Республикаһының Милли йәштәр театры художество йәһәтенән үҫте, репертуарҙары байыны. Минеңсә, был иң элек рус труппаһын етәкләгән Мөсәлим Кулбаевтың исемеңә бәйле. Ул үҙен сағыу үҙенсәлеккә эйә булған рәссам итеп күрһәтә алды. Икенсенән, театрҙа асылған камерный сәхнә ҡыҙыҡлы эксперименттар һәм яңы формалар эҙләү майҙаны булып әүерелде. Йәш режиссер Искәндәр Сакаевтың рус һәм милли классиканы үҙ итеүе ҡыуаныслы.

«Нур» Өфө татар дәүләт театры татар мәҙәниәтенең үҙенсәлекле үҙәге булып тора. Ул Салауат Нурисламов, Элмир Ғәзизуллин, Резеда Зарипова, Айһылыу Ғүмәрова кеүек һәләтле актерҙарҙы үҫтерә.

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының быуындарҙан-быуындарға күсә килгән традициялары бар, уны яраталар, яңы тамашаларын көтөп алалар. Режиссер Гөлнара Вәлитова Мостай Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы буйынса ҡуйған «Хыял күпере» спектакле Ырымбурҙа уҙған II Халыҡ-ара һәм Силәбелә булып үткән «Ҙур Урал» VIII асыҡ төбәк фестивалдәрендә танылыу яуланы.

Республикабыҙҙың башҡа ҡала һәм райондарындағы театрҙар ҙа Башҡортостан халҡының рухи донъяһын байытыуға тос өлөш индерә. Әйтәйек, ҡала етәкселәренең ярҙамы менән Стәрлетамаҡ театрҙар берекмәһе бик матур бина алды. Рус драма театры ҡуйған «Ете изге ҡыл» (А.Бовен) драматик балладаһы, «Алма ханым» ( Р.Рискин) музыкаль комедияларын тамашасылар яратып ҡарай. Башҡорт драма театры иһә, йәш булыуына ҡарамаҫтан, бөтә республикала киң билдәле. Бында уның баш режиссеры Гөлдәр Ильясованың юғары квалификацияһы асыҡ тойола. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә театр тамашасылар араһында ҙур абруй ҡаҙанып өлгөрҙө.

Коллектив башҡорт халҡының тарихын һәм яҙмышын яҡтыртҡан, бөгөнгө көн, заман геройы хаҡында уйланыуҙарға ҡоролған әҫәрҙәргә йыш мөрәжәғәт итә.

Ильяс Гәрәев етәкләгән Туймазы татар драма театрының берҙәм коллективының яҡшы матди базаһы бар. Йәшлек һәм ижади дәрттә юлдаш иткән был коллектив өрәңы табыштары менән ҡыуандыра белә.

Салауат башҡорт драма театры ла башҡорт милли театрҙарының юғары зауығын уңышлы дауам итә. Әлбиттә, коллективтың ижады һәм матди йәһәттән уңышлы эшләүендә уның директоры Наилә Байкованың хеҙмәт өлөшө ҙур.

Театрҙың матур традицияларына ихтирамлы мөнәсәбәт, драматургияға заманса ҡараш, тәрән йөкмәткенең сағыу сәхнә теле менән айырылғыһыҙ бәйле булыуы — Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт драма театры бына ошо ҡанундарға таянып ижад итә. Һәләтле режиссер Дамир Ғәлимов етәкселек иткән был үҙенсәлекле коллективтың «Төштәге йыр» (Т.Ғарипова), «Тамарис» (Т.Ғәниева) һәм «Абыстай» (Г.Әхмәтҡужина) спектаклдәрен өфөләр ҙә ихлас ҡараны, драматургия өлкәһендә өр-яңы исемдәр асты.

Үрҙә әйтелгәндәр республикабыҙҙа ижади эшмәкәрлек өсөн бөтә мөмкинлектәр булыуын, Башҡортостан театрҙары яңы быуатҡа яңы асыштар, ҙур табыштар менән аяҡ баҫһын өсөн күп нәмә эшләнеүен асыҡ раҫлай.



05-2001.p65 125 27.07.01, 12:19